**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерства образования и науки Республики Башкортостан**

**Муниципальное казенное учреждение отдел образования**

**муниципального района Учалинский район Республики Башкортостан**

**МБОУ СОШ с.Сафарово муниципального района Учалинский район**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
| --- | --- | --- |
| Руководитель ШМО | Заместитель директора по УВР | Директор |
| Султанова З.З. | Имангулова Н.Н.. | Шарафутдинова Л.Ф |
| Приказ №1 от «29» августа 2025 г. | Приказ №1 от «29» августа 2025 г. | Приказ №1 от «29» августа 2025 г. |

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА**

(ID 1892519)

**учебного предмета «Родной(башкирский)язык»**

для обучающихся 1-4 классов

**Учалы 2025 год**

**3-сө класс өсөн туған(башҡорт) теленән**
**календарь-тематик планлаштырыу.**

Башҡорт теле: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 3-сө класы өсөн туған (башҡорт) телен өйрәнеү өсөн дәреслек / Ф.Ф. Мортазина, З.Ғ. Нафиҡова/. - Өфө: Китап, 2019 йыл;
Примерная основная образовательная программа начального общего образования (одобрена решением федерального учебно-методического объединения по общему образованию, протокол № 1/22 от 18 марта 2022 г.); Сәғәттәр һаны: барлығы 68 сәғәт,аҙнаһына 2 сәғәт.

| № | Дәрес темаһы | Дәрес һаны | Үткәреү ваҡыты | | Өйгә эш |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План. | Факт. | |
| 1. | **Тел тураһында дөйөм мәғлүмәт.** 2 сәғ. | | | | |
| 1. | **Блок: «Мин башҡорт телен өйрәнәм»** | | | | |
| 2. | Һаумы, мәктәп! Байрам менән, хөрмәтле өсөнсөләр! | 1 | 02.09. | 1-се сирек. | 3-сө күнегеү,3-сө бит, яҙма |
| 3. | Башҡорт теле – башҡорт халҡының теле. | 1 | 04.09. | | 3-сө күнегеү,5-се бит, яҙма |
| 4. | **Фонетика и графика. Блок: «Танышыу»6 сәғәт.** | | | | |
| 5. | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Һиңә нисә йәш? | 1 | 09.09. | | 1-се күнегеү,6-сы бит, һөйләргә |
| 6. | Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар. Башҡорт теленең төп законы. Һин ҡайҙа йәшәйһең? | 1 | 11.09. | | 4-се күнегеү,9-сы бит, яҙма |
| 7. | Контроль инеш диктант “Мәктәп”. “Һинең ғаиләң ниндәй? | 1 | 16.09. | | Һинең ғаиләң ниндәй? Хикәйә төҙөргә. |
| 8. | Хаталар өҫтөндә эш. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар | 1 | 18.09. | | Тартынҡыларҙың бүленешен ятларға. |
| 9. | Йомшаҡ һәм ҡаты тартынҡылар. “Буш ваҡытыңда нимә менән шөғөлләнәһең? | 1 | 23.09 | | 4-се күнегеү,91-сы бит, яҙма |
| 10. | Айырыу билдәләре **ь** һәм **ъ** | 1 | 25.09 | | Һүҙҙәрҙе ятларға. |
| 11. | **Лексика. Блок: «Минең мәктәбем» 8 сәғәт.** | | | | |
| 12. | Һүҙҙең лексик мәғәнәһе (ҡабатлау). Мин бөгөн дежур. | 1 | 30.09 | | Нимә ул текст?12-се бит, таблицаға ҡарап һөйләргә. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 13. | Һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе (таныштырыу). Башҡорт теле дәресендә. | 1 | 2.10 | | 3-сө күнегеү, 19-сы бит. |
| 14. | Синонимдар (таныштырыу). Китап – яҡшы дуҫ. | 1 | 7.10. | | 3-сө күнегеү, 22-се бит. Күсереп яҙырға. |
| 15. | Синонимдарҙы телмәрҙә ҡулланыу. Айһылыу Йәғәфәрова – балалар яҙыусыһы. | 1 | 9.10 | | 1-се күнегеү, 25- се бит, синонимдарҙы күсереп яҙырға |
| 16. | Антонимдар. Республиканың халыҡ яҙыусыһы – Ноғман Мусин. | 1 | 14.10 | | 2-се күнегеү, 27- се бит, антонимдарҙы күсереп яҙырға |
| 17. | Антонимдарҙы, омонимдарҙы телмәрҙә ҡулланыу. | 1 | 16.10 | | 3-сө күнегеү, 29- сы бит, антонимдар ҡуйып күсереп яҙырға |
| 18. | Контроль диктант “Мышы балаһы”. | 1 | 21.10 | | 3-сө күнегеү, 29- сы бит, омонимдарҙы күсереп яҙырға |
| 19. | Хаталар өҫтөндә эш. Иҫкергән һүҙҙәр (таныштырыу). | 1 | 23.10 | | Иҫкергән һүҙҙәр яҙып килергә. |
| 20. | **Һүҙ составы (морфемика) Блок: «Мин һәм минең ғаиләм» - 6** | | | | |
| 21. | Хаталар өҫтөндә эш. Һүҙҙең тамыры. Олатайым өйрәтеүҙәре. | 1 | 6.11 | 2-се сирек. | 3-сө күнегеү, 33- сө бит |
| 22. | Тамырҙаш һүҙҙәр. Уларҙың билдәләре. Өләсәйем кәңәштәре. | 1 | 11.11 | | 2-се күнегеү, 33- сө бит. |
| 23. | Бер тамырҙан торған һүҙҙәрҙе синонимдарҙан, омонимдарҙан айырыу (терминды әйтмәйенсә). Минең шәжәрәм. | 1 | 13.11 | | Тамырҙаш һүҙҙәр яҙырға |
| 24. | Һүҙҙең тамырын билдәләү(ҡабатлау). Ғаилә байрамы. | 1 | 18.11 | | 4-се күнегеү, 34- се бит, ижеккә бүлеп яҙырға |
| 25. | Ялғау тураһында ҡабатлау. Минең яратҡан шөғөлөм. | 1 | 20.11 | | Һүҙ яһаусы ялғауҙарҙы ятларға |
| 26. | Ялғау төрҙәре. Мин һәм спорт. | 1 | 25.11 | | 5-се күнегеү, 60-сы бит. |
| 27. | **Морфология. Һүҙ төркөмдәре. Блок: «Мин һәм минең дуҫтарым» Бөтәһе 26 сәғәт.** | | | | |
| 28. | **Исем: (6 сәғәт)** | | | | |
| 29. | Исем: дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. | 1 | 27.11 | | 2-се күнегеү, исемдәрҙе күсер, составын тикшер. |
| 30. | Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе айырыу. | 1 | 2.12 | | 1-се күнегеү, яңғыҙлыҡ исемен күсерергә, 101-се бит. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 31. | Күплектәге һәм берлектәге исемдәр. | 1 | 4.12 | | Күплек ялғауҙарын ятларға, 86-сы бит, таблица. |
| 32. | Исемдәрҙең килеш һәм һан менән үҙгәреүе. | 1 | 9.12 | | Килеш һорауҙарын ятларға, 92-се бит. |
| 33. | Исемдәрҙе затта үҙгәртеү. Исемдәргә морфологик (грамматик) анализ. | 1 | 11.12 | | 2 исемде затта үҙгәрт. |
| 34. | Контроль диктант “Шыршыҡай”. | 1 | 16.12 | | 3-сө күнегеү, күсерергә, ятларға. |
| 35. | **Сифат. 4 сәғәт** | | | | |
| 36. | Хаталар өҫтөндә эш. Сифат: дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. | 1 | 18.12 | | 2-се күнегеү, сифаттарҙы табып күсер. |
| 37. | Төп һәм шартлы сифаттар (терминды аңлатмайынса). | 1 | 23.12 | | 4-се күнегеү, 127-се бит. |
| 38. | Сифат дәрәжәләре | 1 | 25.12 | | 127-128-се биттәр, таблицаны ятларға. |
| 39. | Сифатҡа грамматик анализ. | 1 | 13.01. | | 5-се күнегеү, 130-сы бит, һүрәт буйынса хикәйә төҙө. |
| 40. | **Алмаш. 4 сәғәт.** | | | | |
| 41. | Алмаш (дөйөм төшөнсә). | 1 | 15.01 | 3-сө сирек | 3-сө күнегеү, 132-се бит, ятларға |
| 42. | Зат алмаштары, уларҙың һанда һәм килештә үҙгәреүе. | 1 | 20.01 | | 3-сө күнегеү, 134-се бит, ятларға. |
| 43. | Алмашҡа грамматик анализ. | 1 | 22.01 | | 2-се күнегеү, 134-се бит. |
| 44. | **Изложение “Шыршы турғайҙары”.** | 1 | 27.01 | | 2-се күнегеү, 135-се бит. |
| 45. | **Ҡылым. 8 сәғәт.** | | | | |
| 46. | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡылым: дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. | 1 | 29.01 | | 2-се күнегеү, 109-сы бит |
| 47. | Ҡылымдарҙың заман һәм һан менән үҙгәреүе. | 1 | 3.02 | | 4-се күнегеү, 112-се бит |
| 48. | Ҡылымдарҙа юҡлыҡты беледереүсе –ма, - мә киҫәксәләре. | 1 | 5,02 | | 5-се күнегеү, 111-се бит. |
| 49. | Хәҙерге заман ҡылымдарына берлектә һәм күплектә һорауҙар ҡуйыу. | 1 | 10.02 | | 4-се бит, 111-се күнегеү. |
| 50. | Үткән заман ҡылымдарына берлектә һәм күплектә һорауҙар ҡуйыу. | 1 | 12.02 | | 3-сө күнегеү, 120-се бит. |
| 51. | Ҡылымдарға грамматик анализ. | 1 | 17.02 | | 1-се күнегеү, 122-се бит. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 52. | **Контроль диктант “Башҡорт аты”.** | 1 | 19.02 | | 3-сө күнегеү, 123-сө бит, ҡабатларға. |
| 53. | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡылымды ҡабатлау күнегеүҙәре. | 1 | 24.02 | | 3-сө күнегеү, 124-се күнегеү. |
| 54. | **Һан. 4 сәғәт.** | | | | |
| 55. | Һан. Ябай һәм ҡушма һандар. Минең тыуған көнөм. | 1 | 26.02 | | 1-се күнегеү, 93-сө бит, һандарҙы күсер. |
| 56. | Төп һәм рәт һандар. Ҡунаҡта үҙеңде нисек тоторға? | 1 | 03,02 | | 6-сы күнегеү, 118-се бит. |
| 57. | Һандарҙың килеш менән үҙгәреүе. Килеш һорауҙары. Аҡбай – ысын дуҫ. Минең бесәйем (К. Ушинский буйынса). | 1 | 05.02 | | 2 һанды килештә үҙгәрт. |
| 58. | Телмәрҙә һандарҙы ҡулланыу. Хикәйә төҙөү. Яратҡан уйынсыҡтарым. | 1 | 10.03 | | Хикәйә төҙөргә. “Минең ғаиләмдә” |
| 59. | **Синтаксис. Блок: «Минең республикам» 10 сәғәт.** | | | | |
| 60. | Һөйләм. Һөйләмдең  баш киҫәктәре – эйә һәм хәбәр. Башҡортостан – мөғжизәле ер. | 1 | 12.03 | | 137-се күнегеү, 137-се бит |
| 61. | Эйә һәм хәбәр. Күнегеүҙәр. Өфөләге Дуҫлыҡ монументы. | 1 | 17.03 | | 2-се күнегеү, 135-се бит, баш киҫәктәрҙе билдәлә |
| 62. | Һөйләмдең  эйәрсән киҫәктәре (төрҙәргә бүлмәйенсә). Салауат Юлаев – башҡорт халҡының милли батыры. | 1 | 19.03 | | 1-се күнегеү, 35-се бит. |
| 63. | Йыйнаҡ һәм таргҡау һөйләм. Өфөлә транспорт. | 1 | 24.03 | | 2-се күнегеү, 35-се бит, , баш киҫәктәрҙе билдәлә. |
| 64. | Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре.   Хәбәр һөйләм. | 1 | 26.03 | 4-се сирек | 2-се күнегеү, 39-сы бит, миҫалдар күсер |
| 65. | Һөйләмдә  **һәм, ләкин** теркәүестәре менән килгән тиң киҫәктәрҙе күҙәтеү. Тирә-яҡты өйрәнеү музейына экскурсия. | 1 | 7.04 | | **һәм, ләкин** менән 2 һөйләм төҙөргә. |
| 66. | Һорау һөйләм. Нисек сәйәхәт ойошторорға? | 1 | 9,04 | | Диалог төҙөргә. |
| 67. | Өндәү һөйләм. Фәрит Исәнғолов – балалар яҙыусыһы. | 1 | 14.04 | | 2 өндәү һөйләм төҙөргә. |
| 68. | Һөйләмдә өндәш һүҙ. Мәскәү – беҙҙең илдең башҡалаһы. | 1 | 16.04 | | Өндәш һүҙ менән диалог төҙөргә. |
| 69. | **Күсереп яҙыу “Миләүшә”.** | 1 | 21.04 | | Өндәш һүҙ менән 2 һөйләм күсерергә |
| 70. | **Телмәр үҫтереү.  Блок: «Мине уратып алған донъя».  8 сәғәт.** | | | | |
| 71. | Хаталар өҫтөндә эш. Аралашыу этикет нормалары. Тыуған яғым тәбиғәте. | 1 | 23.04 | | 1-се күнегеү, һорауҙарға яуап яҙырға. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 72. | Уҡыу барышында һәм көндәлек аралашыуҙа телмәр этикетын һаҡлау. Башҡортостан тауҙары. | 1 | 28.04 | | 2-се күнегеү, 5-се бит, диалог төҙөргә. |
| 73. | Диалогта һәм дискуссияла телмәр мәҙәниәте. Бар үләндәр ҙә файҙалымы? | 1 | 30.04 | | “Дуҫым менән мәктәптә” диалог төҙөп яҙырға |
| 74. | Тексттың темаһы. Төп мәғәнәһе. Башҡортостан – күлдәр иле. | 1 | 5.05 | | 1-се күнегеү, 39-сы бит. |
| 75. | Тексттың башы (исеме). Бирелгән текстҡа исем уйлау. Ағиҙел – тыуған яҡтың ынйыһы. | 1 | 7.05 | | 1-се күнегеү, 37-се бит. |
| 76. | Текст өлөштәренең (абзац) бер-бер артлы мәғәнәүи яҡтан теҙелеп килеүе. Ат – кешенең дуҫы. | 1 | 12.05 | | 1-се күнегеү, 42-се бит. |
| 77. | **Контроль диктант “Һыу инеү”.** | 1 | 14.05 | | 1-се күнегеү, 43-сө бит.Хикәйә төҙөргә. |
| 78. | Хаталар өҫтөндә эш. Текст буйынса үтелгәнде нығытыу. | 1 | 19.05 | | 1-се күнегеү, 44-се бит. |
| 79. | Текст төҙөү. Минең хыялым. | 1 | 21.05 | | 4-се күнегеү, 45-се бит. |
| 80. | Бөтә үтелгәнде ҡабатлау, йомғаҡлау. | 1 | 26.05 | | Китаптар уҡырға. |

**Эш программаһына ҡушымта.**

Контроль диктант.

Мышы балаһы.

Кисә малайҙар урманға барҙылар. Улар унда бәләкәй генә мышы балаһын күрҙеләр. Оло мышы ҡайҙалыр киткән. Ел иҫкәндә ҡыуаҡтар ҡыштырлай. Тауышты ишетеп мышы быҙауы ҡурҡып ҡуя. Уның нәҙек аяҡтары ҡалтырай. Быҙау әсәһенә тауыш бирә. Әсәһе ишетмәй. Оҙаҡламай быҙауҡай ҡыуаҡтар араһына инеп юғалды.

Һүҙлек диктанты

Ҡуян, йомран, йүгерә, еүешләнде, төйөнсөк, ваҡыт, Муйнаҡ, тейен, эшсе, Өфө, айыу, юрған, уҡыусы, күләүек, баҫыу.

Күсереп яҙыу

Тере сәғәттәр.

Минең олатайым тәбиғәтте бик ярата. Уны яҡшы белә. Миңә лә тәбиғәт тураһында ҡыҙыҡлы нәмәләр һөйләй. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен һеҙгә лә әйтәйем әле.

Аяҙ көндәрҙә һәр сәскә билдәле бер сәғәттә тажын аса, йоҡонан уяна. Мәк сәскәһе иртәнге сәғәт биштә асыла. Ә киске сәғәт етелә ябыла. (44 һүҙ.)

Эш.

1. Үҙең белгән өс сәскә исемен ижеккә бүлеп яҙ.

2. Һинең ҡартатайыңдың (олатайыңдың) исеме кем?

Контроль диктант

Башҡорт аты.

Ер йөҙөндә ике йөҙ иллегә яҡын тоҡом ат бар. Шулар араһында башҡорт аты көслө һәм талымһыҙ булыуы менән бүтән тоҡомдарҙан ныҡ айырыла. Башҡорт тоҡомо далалы ерҙә лә, таулы-урманлы яҡтарҙа ла йәшәй. Сасҡау һыуыҡҡа ла, йәйге селләгә лә бирешмәй. Тауҙарға еңел артыла. Тибендә үҙенә аҙыҡ таба. Һыуҙың таҙаһын ғына эсә. Бесән менән һоло ғына ашай.

**Эш.**

Юлдан-юлға күсереп булмай торған ике ижекле һүҙҙәрҙе айырып яҙ.

Ике өндө белдергән хәрефтәрҙең аҫтына һыҙ.

Һуңғы һөйләмдә ярҙамсы һүҙҙең аҫтына һыҙ.

Һүҙлек диктанты

Япраҡ, йоҙаҡ, йүнәлеш, болоттар, Ағиҙел, бесәйем, түңәрәк, ерек, эремсек, Сибай, йылға, йәшел, бүрәнә, туған тел, юлдар.

Күсереп яҙыу

Миләүшә.

Яҙ килде. Йәшел үлән шытып сыҡты. Ағастар япраҡ ярҙы. Бал ҡорттары алма ағасына ҡунып ҡаранылар. Ләкин ағастар сәскә атмағандар әле.

Ҡорттар ҡыуаҡ төбөндәге зәңгәр сәскәне күреп ҡалды. Был миләүшә сәскәһе ине. Ул ҡорттарҙы хуш еҫе, тәмле балы менән һыйланы. (39 һүҙ.)

Эш.1. Тәүге ике һөйләмдең һыҙмаһын һыҙ.

2. Текста предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙ.

Эш.

1.Текста предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәрҙең аҫтына ике тура һыҙык һыҙ.

2. Тәүге өс һөйләмдә эйәне, хәбәрҙе билдәлә.

Контроль диктант.

Шыршыҡай.

Ҡар көнө буйы яуҙы. Эре ябалаҡ ҡарҙар бөтә донъяны аҡҡа буяны. Ер өҫтө ҙур аҡ юрған ябынды.

Шыршы ағастарын ҡар баҫты. Уларҙың ботаҡтары аҫҡа эйелде. Ваҡ ҡыуаҡтарҙың остары ғына күренә.

Шыршы ботағына һайыҫҡан килеп ҡунды. Ағастан ҡар һыпырылып төштө. Барлыҡ ҡар аҫҡа сәселде. Һайыҫҡан шыҡырыҡлап нимәлер һөйләне лә, осоп китте. Шыршы ботағы еңеләйеп ҡалды.

Һүҙлек диктанты

Ҡайын, тиҙҙән, ноябрҙә, йонсоу, Салауат Юлаев, епшек, юғалды, йәйен, дүртмөйөш, оҙонлоғо, йүгән, ялҡау, бейеү, еләк, эҙҙәр, Мәскәү.

Изложение

Шыршы турғайҙары.

Һеҙҙең ҡыш көнө урманда булғанығыҙ бармы? Йәмле лә һуң ҡышҡы урман! Айырыуса шыршы һәм ҡарағайҙар күркәм булалар. Уларҙың ботаҡтарында матур булып ҡар ята. Бейек шыршыларҙың ботаҡтарында оялар күргәнегеҙ бармы? Унда шыршы турғайҙары оя яһайҙар. Улар сатлама һыуыҡтарҙа ла геү килеп уйнайҙар. Шыршы турғайҙары шыршы тубырсыҡтарының орлоғон ашайҙар. Улар ҡыш көнө бала сығаралар. Балалары йәйҙе ҙурайып ҡаршылайҙар.

Эш.

Текстағы һорауҙарға яуап яҙ.

Ауыл һәм урман һүҙҙәрен күплектә яҙ.

**Изложение.** Бесәйем.

Минең бесәйем һоро төҫтә. Уның ҡолаҡтары һаҡ, оҙон мыйыҡтыры тырпайып тора. Бесәйемдең йомшаҡ туны ебәк ке-ек йылҡылдай. Уның тырнаҡтары ҡоростай үткер, күҙҙәре ут кеүек янып тора.

Бесәйем иркә һәм хәйләкәр. Ул иркәләнеп мырылдай, күҙҙәрен йома, ҡойроғон болғай, һыртын көмрәйтә.

Көндөҙ бесәйем ҡояшта ҡыҙына, туйғансы йоҡлай, ә кисен һунарға сыға. Ул төн буйына сысҡандар ҡарауыллай.

Эш.

1. Е хәрефе булған һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеп яҙ.
2. Һуңғы һөйләмдең баш киҫәктәрен билдәлә.
3. Бесәйҙен тасуирлаған өс һүҙҙе яҙ.

**Һүҙлек диктанты**

Ямғыр, күңелле, Ҡариҙел, борон-борон, аҡҡош, йомшаҡ, йөҙөк, юлаҡлы, гөлйемеш, йүкә, өсмөйөш, элек, егәрле, дәфтәр, мкәтәп.

**Контроль диктант.**

Һыу инеү.

Оҙаҡламай уҡыуҙар тамамлана. Тиҙҙән оҙаҡ көткән йәмле йәй етә. Һеҙ ял итергә, уйнарға, ҡояшта ҡыҙынырға, һыу инергә ашҡынаһығыҙ.

Йәйге ҡояшта яйлап ҡына ҡыҙынығыҙ. Һыу инеү ҡағиҙәләрен нык һаҡлағыҙ. Йөҙә белмәгән кешегә билдән юғары һыуға инеү хәүефле. Ярҙан бик алыҫҡа тәрәнгә йөҙөп китмәгеҙ. Өшөгәнсе һыу инеү ҙә зыянлы. Һыу ингәндә бер-берегеҙҙе күҙәтергә лә онотмағыҙ.

Эш.

1. Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәр аҫтына һыҙ.
2. Йәй, һыу, кеше, ял. Сәскә һүҙҙәренә күплек ялғауы ҡушып яҙ.
3. Ҡояш, яр, зыян һүҙҙҙәрен транскрипцияла яҙ.

**Һүҙлек диктанты** Быяла, ҡайын, календарҙа, емерек, юлдаш, тейеш, йүнһеҙ, ҡойроғо, тәлмәрйен, йорттар, Башҡортостан, элек, ап-аҡ, ейәнсәр, йылан.